ШӘЙЕХЗАДА
БАБИЧ

# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ-
# БАШҠОРТТАР

**Бабич Шәйехзада**

Б 12 Беҙ үҙебеҙ — башҡорттар: шиғырҙар, поэмалар, фельетондар, мәҡәләләр, хаттар, көндәлектәр. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1994. — 640 бит.

ISBN 5-295-01426-6

Бөйөк башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич (1895—1919) тыуыуына 100 йыл тулыу уңайы менән нәшер ителгән был китапҡа ғәжәп бай мираҫтан төрлө баҫмаларҙа беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып килгән әҫәрҙәр: шиғырҙар, поэмалар, фельетондар һәм авторҙың хаттары, көндәлектәре, шулай уҡ замандаштарының иҫтәлектәрендә терләп ҡалған шиғырҙар тупланды.

Б $\frac{4702110200-90}{М\ 121(03)-94}$ 70—94

**ББК 84 Баш**

Литературно-художественное издание

**Шаихзада Мухаметзакирович БАБИЧ**

**МЫ — БАШКИРЫ**

**Избранное**

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *М. С. Игебаева*
Рәссамы *М. М. Ғайсин*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *И. Я. Зарипова*
Корректоры *Ә. З. Хажиева*

Замандаштары иҫтәлектәрендә килтерелгән шиғырҙар . . . 405

## Мәҡәләләр, фельетондар

### 1912—1914

Әйтеп үҙайым . . . 430
Ишми һөйөнә . . . 433
Мәҡәлдәр фәлсәфәһе (1) . . . 435
Мәҡәлдәр фәлсәфәһе (2) . . . 437
Әгәр ҙә мин булһам... . . . 440

### 1916

Өфө тигеҙһеҙлектәре . . . 442
«Мәҙрәсәи Ғәлиә»нең ун йыллыҡ байрамы . . . 445
Төрлө хәбәрҙәр . . . 452
«Көлкә ҡапсығы» йыйынтығына һүҙ башы . . . 454
Мөтәшәббиһат . . . 455
Өфө ҡыҙыҡтары . . . 460
Имза ҡарағы . . . 466
Өфөнән . . . 468
Өфө сәхнәһенән . . . 473
Яҙыу . . . 478
Иҫтә лә юҡ иҫке сәкмән . . . 482

### 1917

Ишан үлгәс . . . 486
Өфө хәбәрҙәренең мөндәрижәһе . . . 504
Сәфәр алдынан . . . 506
Һарай серҙәре . . . 521
Троцкиҙа . . . 527

### 1918

Ғәйет . . . 529

## Көйҙәр тарихы

Таштуғай . . . 532
Батыр старшина көйө . . . 532
Ҡаһым түрә көйө . . . 533
Буранбай . . . 534
Сибай кантон көйө . . . 536
Сантар юрга көйө *(бейеү көйө)* . . . 537
Аллаяр батыр көйө . . . 537
Колой көйө . . . 538



Бер тирәк көйө . . . 538
Шәүрәкәй йәки Сәйфулла көйө . . . 538
Шаһибәрәк көйө *(Шаһи Мөбәрәков)* . . . 539
Үҙәнбай көйө . . . 540
Бала ҡарга . . . 541
Ғәзизәкәй көйө . . . 542
Һырдарья көйө . . . 542
Турат көйө . . . 543
Ҡаһарман кантон . . . 543
Әлми кантон . . . 545
Ҡара ҡалпаҡ көйө . . . 545
Дәләкә батыр көйө . . . 546
Ялан Йәркәй . . . 546

## Хаттар

Тугандарына . . . 548
Вәли Хангилдинга *(ике хат)* . . . 549
Сәйфи Ҡудашҡа *(ике хат)* . . . 551
Сәрүәр Әҙһәмовага . . . 553

## Көндәлек яҙмалар

Себер сәхрәһендә ҡаҙаҡта уҙҙырган көндәрем . . . 558

Аңлатмалар . . . 571

## ИШАН ҮЛГӘС

*2 февраль.*

Ниңә былай был? — тиһәм, Һаммас ишан үлгәнгә, имеш: ҡар ҡоторған, донъя тултырған, буран ҡупҡан. Муҡсай күтәргән ир һәм ҡыҙ шәкерттәр менән урам тулған: — «Аллаға шөкөр», ишан үлмәктең файҙаһын күрҙек. Бер көн дәрестән азат!» — тип ҡайтып баралар.

Һәр муаһтың-мосолмандың тәҙрәһе яғынан үтер хәл юҡ, шундуҡ ҡарт-ҡороларҙың әскелтем-сөскөлтөм мәҡәмәләләр менән мыжғырланыуҙары ишетелә: әй, былар ишан рухына Ҡөрьән уҡып ята торғандарҙыр, моғайын, тип уйлап китәһең.

Ниңә был мәхдүм хәҙрәт иртә менән сабаланып йөрөй, тиһәң, атаһы үлгәнгә икән: почтаға барһаң да ул күренә, телеграфханала ла ул, хәҙрәттәр янында ла ул.

Ниңә ишан ҡапҡа төбөндә ҡар ирей башлаған икән, тиһәң, мөридтәрҙең күҙ йәштәре менән сыланып ирегән, имеш, ул. Әйтәм ерле, күҙҙәре бе-

---

Мәҡәмәлә — көй.





шекләнеп бөткән, әйтәм, гөрһөлдәп йөрөйҙәр... Улай икән!

Кис менән сыҡһам, ни күрәйем: салмалы халыҡ тейәп извозчиктар саба, барыһы ла «мәғмурия»ға табан ағыла... Был ни эш был тиһәм, ишанға хатимҡә сығып баралар икән ул да булһа.

Ишан үлеүҙән бер көн элек мәшһүр мулла Таҡырйән әл-Хәсәни Өфө вокзалында нишләп һерәйеп тора тиһәм, Троицкиға барырға поезд көтөп тора икән, ишандың сирләүен ишеткәс тә: «Туҡта, барып ҡайтайым, бер-бер хәл булмаһын», — тип төшкән шул, күрәһең. Ваҡиған, әүлиә икән, шайтан: как ул килеп етте, ишан китеп тә өлгөрҙө... (мәрхүмдең кергән тоннеле яҡты, бара торған мәүҡиғы яҡшы булһын, амин! Дауакамин!)

Ник был ишан мәктәбендә бер мөйөштә бер шәкерт ниңә уйға ҡалған, тиһәм, мәрҫиә яҙып маташа икән:

*Үлде ишан, үлде зәйшан;*
*Фәҡәт исеме ҡалды иҫән.*
*Китте инде йүнле ишан.*
*Ҡалды мәлғүн Ишми ҡуштан!*

---

Мәғмурия — төҙөк, матур биналар мәғәнәһендә.
Хатимкә — Ҡөрьәнде баштан аҙаҡҡаса уҡып сығыу.
Мәүҡиғ — урыны.

Мин барып ингәндә, шул мисрағын яҙған ине, шағир мине күргәс, ҡыҙып: «Бар, сығып кит әле, иртәгә хәҙрәтебеҙ ҡәберендә уҡырға мәрҫиә яҙып ятам, күрмәйһеңме? Бар, сыҡ әле, зинһар! Ҡара таракан булма!» — тип, мине ҡыуып сығарҙы. «Әйҙә, бысранһын инде, бисара!» — тинем, юҡһа кәрәген бирергә ине иҫәп! Мәрҫиәһе нисек башланған егеттең! Тап ҡәберҙә уҡырлыҡ ҡына!.. Әйе, уҡырһың атаң башын!.. Уҡытырҙар бына...

Әйҙә, аҙапланғас, аҙапланһын, тинем инде, юҡһа бик нығытып бешергә ине иҫәбем!

*3 февраль.*

Ишанды күмеү йомғанан сығыуға буласаҡ.

Бөгөн донъя ҡупты, ҡар бураны бигерәк туҙынды. Мөридтәрҙең, ярандарҙың (...), салдарҙың, киленсәктәрҙең илауҙары, шаулауҙары бигерәк ҡеүәтләнде, ишан йортонда мәхшәр ҡупты. Бөтә ҡала ишан тураһында ғына һөйләнә, шул хаҡта ғына гөрләй башланы.

Мин: «Лә хәүлә вә лә ҡеүәтә», — тип, иртәнсәк урындан торғас та, был көндөң ябай көн түгел икәнен тәҙрәгә сыжылдап бәрелгән ҡарлы бурандан һиҙҙем.

Сәй өсөн урамға сыҡһам, донъя бигерәк ҡоторонған, күрҙем: әллә ҡайҙарҙа бик ҡаты коло-кол тауыштары, әллә ҡайҙа пожарныйҙар саба! Урам тулы халыҡ! Ул ел, ул буран, бер ҙә харап! Әллә нәмәләр домборлай, шылтырай, гөрләй... бер яҡтан урам тултырып «никруттар» үкертеп килә, гүйә, бөгөн донъя ишан үлгәнгә





риза булмағанлығын күрһәтә: бер яҡтан буран сыҡҡан, бер яҡтан пожар сыҡҡам, бер яҡтан ел олой...

Бер яҡтан «никруттар» ишан үлгәнгә тәәссеф марш йырлап киләләр төҫлө, гармундары ла ишан үлгәнгә үкереп илаған төҫлө...

* * *

Ишанды күмергә барыу, ай-яй, тантаналы булып сыҡты ла һуң...

Урамды буйҙан-буйға тултырып барған мосолман халҡын күреп ситтән ҡарап көлөп тороусы рус йәмғиәте: был ни эш булды! — тип торалар буғай, кем белһен!..

Ваҡиған, урамдың буйынан-буйына барған йәйәүле һәм саналы халыҡтың тас сөннәтле бүректәп генә булыуҙары, тас мосолман йәмәғәте генә булыуҙары, рустарҙың ситтән ҡарап ҡалыуҙары күңелгә тәьҫир итә, мосолмандарға ни ҙә булһа бер ғалибәт табылған төҫлө, бер мыуафиҡ эш эшләнелгән төҫлө тәьҫир итә...

Бигерәк тә ана шул саналарға тейәлгән йәшелкенсәктәрҙең рухтары күтәрелгән, шатлыҡтары, эстәренән сығып, бөтә йөҙҙәренә йәйелгән, ирендәре ҡолаҡтарына тиклем йырылған. Көләләр, шаулайҙар, ҡайһы береһе йырлап та ебәрә.

Үҙ күңелдәренә яҡын кеше үлһә, былай ауыҙ йырып торалмаҫтар ине әле.

---

Ғалибәт — өҫтөн.

Ана мөридтәр тейәлгән саналар!

Күберәге, әсе буранға ҡарамаҫтан, салма-сапандан ғына ултырғандар... Муйындарын сепрәктәр менән урап бөтөргәндәр, ҡайһыһы меңле тәсбихын аҫҡан... Уларҙың әсендә ниһаяһыҙ хәсрәт, күҙҙәрендә өҙлөкһөҙ йәш! Муйындары аҫҡа уҡ эйелгән, бөтә бәхет-сәғәҙәттәрен ишан үҙе менән бергә алып киткән хас иттереп баралар.

Бара торған ерҙән бер ҡаҙаҡ мөрите: — Яфармай, жарҡытғамай! — тип, ай-һай һалып ебәрҙе.

Бер башҡорт мөриде:

*Хәҙрәтебеҙҙең йөҙҙәре яңы тыуған ай кеүек,*
*Хәҙрәтебеҙҙең сәлләһе яңы яуған ҡар кеүек;*
*Мин йөрөймөн хәҙрәтебеҙҙең эҙен эҙләп,*
*Мәсле ҡара себен кеүек безләп!..* —

тип әсенән йырлап барған ерҙән, кинәттән: «Йә, шәйхем мәдид! Һауа хаҡ!..» — тип ҡысҡырыуына һиҫкәнеп киткәндәй булды...

Тағы бер нисә мөрид: «Йә, һауа», — тип мөңгөрҙәнделәр...

* * *

Аллаһ ғазим мәйет артынан зыяратҡа барып керҙе. Ҡалҡыу ерҙә ҡәбер тирәһенә йыйылдылар. Йәштәр, сәсле хәлфәләр бер тирәгәрәк. Хәҙ-

Аллаһ ғазим — Алла рухы менән ойошторолған зур, етди эш.





рәттәр ҡарға арҡа терәп сүкәйеп ултырҙылар. Мулла Ғәлим Яуышев ҡәбер янындағы ҡайын ағасына менеп ҡунаҡланы.

Йәштәр, бер-береһенә бармаҡ төртөшөп: «Ҡара, ҡара, ҡайҙа менгән?.. Ҡара, анау мулланың күҙе! Нәҡ ишан була торған әҙәм!» — тиешеп көлөшәләр. Һәм белгәне белмәгәндәренә, муллалар уртаһында ултырған Таҡырйән Ихсанды күрһәтеп: «Ана, күрәһең килһә, күр! Теге Өфөнөң шпион муллаһы шул булыр инде», — тиҙәр.

Ишанды күмә башлағанда, һәр мөрит, һәр наҙан, һәр мөхлис, тәбәррек зат шәрифтең тупрағын һибеп, шәрифәткә наил булайыҡ, тип уйланылар, ахырыһы: бер заман ҡар бураны өҫтөнә тупраҡ ямғыры яуа башлағайны. «Етер, етер!.. Әй!.. Өҫ-башты тутырҙығыҙ... һипмәгеҙ!..» — тип көскә-көскә генә туҡтаттылар.

Ишанды күмеп бөтөргәс, буран баҫылды, һис нәмә булмаған кеүек, донъя тынды, ҡояш ялт итте... Һәр мөрид йөрәгенән: «Һи тәбрик, халис әүлиә икән, изге кеше үлһә, йә буран, йә ямғыр булыр», — тиҙәр ине. Бик дөрөҫ һүҙ, аминабә!.. Хәҙрәт үлгәнгә беҙ түгел, бөтә донъя иланы бит!» кеүек һүҙҙәр йөрөй башланы.

Ишанды күмеп бөтөргәс, Ҡөрьән уҡылғас, мәхдүм хәҙрәт үҙе саҙаҡа өләште. Сәсле хәлфәләр:

Мөхлис — саф күңелле, ышаныусан мәғәнәһендә.
Тәбәррек зат — хөрмәтле, ғәзиз һаналыусы.
Наил булыу — ирешеү.
Халис — саф.

«Их, миңә лә тәртһә, извозчиклыҡ булыр ине!» — тип күҙҙәрен тоҙ итеп ҡарап торҙолар. Мәхдүм уларҙың сәстәренән ҡурҡты...

Саҙаҡанан һуң Таҡырйән мулла һәм «Г. С.» хәлфә нотоҡтар һөйләнеләр.

Һуңынан халыҡ таралды. Мөриттәр, кеҫәләрен ҡәбер тупрағы менән тултырып, ҡайтып киттеләр. Ҡайтҡас, ишандың өйөндә ҡалған кәфенлеген бүлештеләр. Кеше башына бер бармаҡ урарлыҡ тиклем сепрәк тейҙе.

«Г. С.» хәлфә ҡайғыла. Ул ишанды күмеп ҡайтҡас, карауатына йығылып, ҡайғырырға тонды. Мәсләгенә бәлҡил хилаф иттереп, Таҡырйәндән дә ҡарараҡ, буяулыраҡ иттереп һөйләүенә бик үкенде. Ниҙәр һөйләгәне башынан берәмберәм йөрөп үтте. Бәғзе бер һүҙҙәре хыялында ҡара болот шәкелендә булып, ҡара болот эсендәге аждаһа ҡиәфәтендә булып килеп теҙелделәр. «Йәмәғәт! Ишан үҙе үлһә лә, мәсләгене үлтермәйек, уның юлы мәңге йәшәһен!» — кеүек һүҙҙәре ҡолағында мөттасәл яңғырап, йәнен үртәп торҙолар. Шул һүҙҙәре күҙ алдына йәмһеҙ ҡара пәрей сүрәтендә булып килеп баҫты.

«Ошо ҡәберстанда йыйылған халыҡ эсендә мәрхүм ишан хәҙрәткә инеп, кәлбенә бер тәсәллә, бер һөйөнөс алып сыҡмаған кеше юҡтыр; эйе, барыбыҙ ҙа һөйөнөп сыға инек!» — тигән һүҙенә

Бәлҡил — йөрәктән әйтелгән һүҙ.
Шәкел — форма, рәүеш.
Мөттасәл — өҙлөкһөҙ.
Тәсәллә — күңел йыуанысы.





ҡаршы, ҡаршыһына әллә ниндәй ҡоттар йәнләнеп килеп баҫтылар. Әллә кемдәр: «Юҡ һүҙ һөйләйһең!» — тип ҡысҡырған төҫлө булды.

Кемдер берәү: «Мин, мәға әл-тәәссеф, ишан хозурынан ҡойонop сыҡтым», — тине.

Кемдер береһе: «Мин, янына кергәс тә, «мөртәт», «бимазаһиб» кеүек ғибәрәләр илә һыйланы», — тине.

Тағы береһе: «Исемемде ишеткәс тә: «Сыҡ, шәйғи, сыҡ, шәйғи! Сыҡ! Сыҡ!» тип, хозурынан ҡыуҙы», — тине. Әллә ниндәй бер мәйет, йәнләнеп килеп: «Ҙур тәслиә тип биргән мәғҡуны минеүлтерҙе», — тине.

Тағы әллә кемдәр: «Урһабания ибтағуһа мә китабнаһа ғаләйһүм» аятына мәсдаҡ булған рәһбаниәттар, иманлыҡтар дауам иткәнен күргәндә һәм бихисап мөридтәрҙең юҡ-бар хөрәфәттәре менән ағыуланып, дини вә мали вә зәфәләрен онотоп, «һауа хаҡ!», «Яшихум!» тип диуаналанып ултырғанлығын күргәндә, «милләттең ни тиклем көсө әрәм булғанда ниндәй ҡәлеб һәм ниндәй выжданһөйөнөр?..» — тип ҡысҡырған төҫлө булдылар. «Г. С.» хәлфәнең күңеле үлтереп ғазаплана башланы. Ул: «Мин бит ул нотоҡто ике мәктәп

Мәға әл-тәәссеф — ҡайғы менән.
Бимазаһиб — йәмһеҙ, ҡотһоҙ мәғәнәһендә.
Тәслиә — йыуаныс.
Мәғкун — бирелгән һүҙ.
Рәһбаният — дәрүишлек.
Зәфә — ауыр хәл.

исеменән вәкил булып һөйләнем, минең үҙ фекерем бөтөнләй башҡа ине», — тип күңелде тынысландырырға тырышһа ла, юҡ, һаман тынысланып бөтмәне, выждандың әллә ҡайһы урынынан ниҙер булһа бер нәмә сәнсеп торҙо, әллә ҡайһы нөктәһенән: «Үҙ фекереңә, үҙ мәсләгеңә хилаф нәмәне ниңә һөйләйһең? Ниңә мәсләгеңде таптайһың!» — тип, бер нәмә ҡысҡырып торҙо.

Ниһәйәт, ул: «Әстәғәфирулла, әстәғәфирулла!» — тип, тәүбә яңыртырға тотондо.

— «Г. С.» хәлфә был нотоҡо менән төштө, үҙ мәсләгенән үҙе ҡалды, «Г. С.» һатылды, фәләнфәсмәтән, — кеүек һүҙҙәр йәштәр араһында шау итте...

Мулла Таҡырйән иһә ишандың грамоталарын, фәзаилдарын, иманлыҡтың мөҡәддәслеген, изгелеген һәм әхирәт ғазаптарын һөйләйһе ерҙә, күберәк ишандың ҡалаға иткән иҡтисади файҙаһын һәм ғилми хеҙмәттәрен һөйләп, үҙенең бик тиҙ генә ҡойроҡ тоттормай торған «хәйләкәр төлкө» икәнен иҫбат итте.

Шуға күрә ул, өйөнә ҡайтҡас: «Булдырҙым бит», — тип уйланы. Шатлығынан күкрәгенә һыйғып: «Булдыра был салмалы төлкө!» — тип ҡуйҙы. Эсендә ҡара пәрейҙәр тырнап торһалар ҙа, үҙ иғтиҡадын, үҙ фекерен әйтә алмаһа ла, үҙ-үҙенән мәмнүн ине. Нотоғон һөйләп бөтөргәс ишеткән «Бәрәкалла!», «Рәхмәт»! тауыштары һаман ҡолағында уйнап торҙо.

---

Фәзаил — өҫтөнлөк, яҡшы сифаттар, яҡшы эштәр.





Ул шул тауыштарға эйәреп йоҡоға талды. Йоҡоһонда ул ишан хәҙрәт менән һаташып сыҡты. Ишан уны нотоҡ менән тәбрик итте: «Троицкиҙың асыҡ ауыҙ имамдарынан уҙҙырҙың, — тине. — Ҡойроҡто бутай беләһең, мөфти ҙә булып ҡуйырһың», — тигән бәшәрәтенә уянып китте...

*3 февраль.*

Кис менән ишан йортонда фәүкылғадә мөһим йәшертен мәжлес булды. Мәжлестә бер-ике хәлфә, бер-ике мөхлис вә яран, бер мәзин һәм мулла Таҡырйән менән мәхдүмдән башҡа кеше юҡ ине.

Мин бер мөйөшкә кереп йәшеренеп ултырҙым. «Ба, хоҙай, ни булыр», — тип ишекте бикләнеләр, ишек арттарына ҡарауылсылар торғоҙҙолар. Быны һуңында мулла Таҡырйән мәжлесте асты. Мәжлес хәҡиҡәте мөһим ине. Мәжлес «мәхдүмде ишанлыҡҡа күтәреү» мәжлесе ине. Мәжлес «мәхдүмде ҡотортоу, вәсүәсә һалыу, мәхдүмдең үҙенең выжданы теләгән ҡәҙерҙәрен, мәсләктәрен йөрәгенән ҡуптарып ырғытып ташлап, уның урынына буяуланған, майланған серек, иҫке нәмәләр һалыу» мәжлесе ине. Йәғни мәжлес «бер кешене икенсе кеше яһау, рухи операция яһау» мәжлесе ине.

---

Бәшәрәт — шатлыҡлы хәбәр.

Мәхдүм баштараҡ: «Был эш минең ҡулдан килмәй, мин теләмәйем быны, намыҫһынам мин, халҡымдан, милләтемдән намыҫһынам мин, юҡ, кәрәкмәй, килештермәйем», — тип ҡараһа ла, булманы. Мәжлестең, билхасса, Таҡырйән вәгәзе тәьҫир итте.

— «Юҡ... һин яңылышаһың, мәхдүм... Атайың нафизын юғалтма. Уның төҙөп киткән тәриҡәтен емермә! Был тәриҡәт, был силсилә бөтөргә тейеш түгел; уның урынына һиндән башҡа кешенең ултырыуы һис мыуафиҡ түгел, һин бының ҡәҙерен бел, ҡулыңдан ысҡындырма! Был һинең бәхет, һәм донъяң, һәм эхирәтең өсөн бәхет; был — Сөләймәндең йөҙөгө! Йөҙөктө ситтәр ҡулына ебәреүгә атайың асла риза буласаҡ түгел! Истиҡәмәтең, диянәтең урынында; атайың урынында ултыр! Был мөҡәддәс урынды юғалтмауҙы һиндән нисә йөҙ мең яран вә мөридтәр талап итәләр, үтенәләр вә үтенәмеҙ!..

Әгәр был урынды юғалтһаң, атайыңдың фатихаһы юҡ. Ул мәңге рәнйейәсәк; бихисаб мөридтәр донъя эхирәт сәғәтенән мәхрүм ҡаласаҡтар,

---

Билхасса — атап, төбәп, махсус рәүештә.
Нафиз — абруй, йоғонто мәғәнәһендә.
Тәриҡәт — мираҫ, башланған эш, башланған юл мәғәнәһендә.
Силсилә — шәжәрә.
Асла — һис.
Истиҡәмәт — тоғролоҡ, намыҫлылыҡ.
Диянәт — динлелек, диндарлыҡ.





стем ҡаласаҡтар, тәәссеф, рәһбаният бик мөҡәддәс эш... Уға, быға баҡма!.. бөтә тәриҡиәт әһелдәре һинең ишан булыуыңды зар тилмереп көтәләр... Фәлән вә фәлән!..» — тип һөйләүҙәре уның рухын биләне. Ҡаршы килә алманы. Мәжлестәге хәлфәләр ҙә бик ҡыҙыу-ҡыҙыу тәшүик вә тәзгибтә булдылар.

Ниһәйәт, мәхдүм, ризалығын белдерҙе лә, тәрән иттереп: «Уф!» тип һулап ҡуйҙы. Гүйә ки бөтә үҙенең маҡсаттары шул «уф» менән бергә күккә осоп киттеләр...

Мәжлес әһле мәхдүмде бөккәс, шатландылар.

Таҡырйән мулла бик самими сүрәттә: «Улай булһа, һин атайың хәҙрәттәренең урынына ултырҙыңмы?» — тине.

Мәхдүм:

— Ултырҙым, — тине.

— Улай булһа, атайың тәриҡиәтен бөтә шәриғәте, бөтә асраһы вә хәфиәте менән ҡабул итеп алдыңмы?

— Алдым.

— Улай булһа, атайың хәликәһендә, атайың ҡулы менән мөридтәрҙе тәрбиә итерһеңме?

— Итермен...

— Бир ҡулыңды улай булһа...

Мәжлес, әһле мәхдүмдең ҡулын ҡыҫып, вә-

---

Тәшүик вә тәзгиб — ондәү һәм өгөтләү.
Асра вә хәфиәт — йәшерен сер һәм борсоуҙар.
Хәликә — изге урын мәғәнәһендә.

гәҙәһен алдылар. Мәхдүмде атайы урынына күтәреп ултырттылар...

— Мә, атайыңдың сапанын кей!

— Мә, атайыңдың салмаһын сал!

— Мә, атайыңдың таяғын тот!

— Мә, атайыңдың тиҫбеһен тарт!

Мәхдүм бөтәһен дә ҡылды...

Мәжлестә, ишан хәҙрәттең хәҙимиәтендә торған бер мөрид, тороп: «Әлхәмделилла, эш булды: инде мин мәхдүм хәҙрәткәйҙән шуны үтенер инем: хәҙрәт ваҡытында хәҙимиәтендә торған кешеләр бынан һуң да шул хәҙимиәттәрендә булырға фатиха бирһәгеҙ ине!» — тине.

Мәжлес, ҡабул итеп, фатиха бирҙе.

Был ан башмаҡсы һәм дарыу ташып йөрөүсе мөридтәрҙең йөҙҙәре асылды, ауыҙҙары тажрайҙы...

Ниһәйәт, «хәйерле сәғәткә» тип, оҙон итеп доға ҡылдылар ҙа, мәхдүмдең ҡулын үбеп, шатланышып, таралдылар.

Мин дә ипләп кенә бер ярыҡтан сығып һыҙҙым.

Икенсе көн ҡаланың бер нисә имамы һәм ахуны саҡырылды. Мәхдүм уларға атайы урынына ултырғанды аңлатты, фатихаларын үтенеп, ус төптәрен ялтыратты. Имамдар: «Бик рәхмәт, бик мәслихәт, беҙҙән доға!» — тип, ҡул оҙайтып, бик оҙаҡ фатиха бирҙеләр.

---

Хәҙимиәт — хеҙмәт.
Жөлүс — (тәхеткә) ултырыу.





Шунан һуң мәхдүмдең ишанлыҡ тәхетенә жөлүсе иғлан ителде. Шуғаса «ни булыр икән» тип, бинәлхәүеф вә рижа торған мөридтәр, шатлыҡтарынан илай-илай өйгә инеп, «хәҙрәткәйем» тип, ҡулдарын үбергә, итәктәрен һөртөргә тотондолар. Йәш ишанды, ишанлығы менән ҡотлап, әйләнәһен аҡса менән күмделәр.

«Йәш ишан» оялыуынан барлыҡ донъяһы менән ҡып-ҡыҙыл булып, сөгөлдөр тейәгән шикелле булып ултырҙы.

Шулай итеп, ҡарт ишан үлде, йәш ишан тыуҙы. Хәбәр — ҡалаға, ҡаланан атрафҡа йәйелде. Ситтәге мөридтәргә ишетелде. Улар, ишетеү менән, ҡарт ишанға зыяратҡа, йәш ишанға күренергә юлға сыҡтылар. Бөтә юлдар ат арбалары, мөридтәр, мосафирҙар менән тулды. Улар ҡалаға килгәс тә тура хәҙрәттәренең ҡәберенә йүнәлделәр. Унда барып, зар-зар илап, йөҙҙәрен ҡәбергә һөрҙөләр. Һәм ҡәберҙән бер ус тупраҡ алып һалдылар *. Һуңынан яңы ишанға инеп күрештеләр. Хәлҡаһына теҙләнделәр, шатланышып

---

Бинәлхәүеф вә рижа — борсолоп һәм өмөтләнеп.
Атраф — тирә-яҡ.
Хәлҡаһына — янына түңәрәкләп.
* Ихтимал, хәҙрәттең тупрағын бер ҙә ҡалдырмай ташып бөтөрөрҙәр. Ихтимал, әлғази билләһи, хәҙрәт ҡәбере Бохараләҙағы әүлиәләр ҡәберенән дә битәр бер мәлжәә, бер мөғъбүт булып китер тип хафаланыусылар ҙа бар. *(Ш. Бабич иҫкәрмәһе.)*

илаштылар, сажаҡалар яуҙырҙылар. Яңы ишанға атайына иткәп мөғәмәләне иттеләр, уға атайына баҡҡан кеүек баҡтылар.

Йәш ишан тағы ҡыҙарҙы, тағы бүртенде:

— Әле мин өйрәнмәгән, миңә тура ҡарамағыҙ әле, — тине. Йәш ҡатындарҙы, киленсәктәрҙе бөтөнләй янына уҡ килтертмәне:

— Мин оялам әле, — тине.

Шулай итеп, мөридтәр бер яҡтан ҡайғырып, бер яҡтан шатланып, ҡайтып киттеләр. Ҡайтып, мәрхүм ишан хаҡында төрлө әкиәттәр тараттылар: хәҙрәттең йәнен Ғазраил ғәлиәссәләм, йәш егет булып килеп, рәхмәт менән ҡабул иткән, имеш; үлгәс, ҡаты буран сығып, нисә йорттарҙы ҡыйратҡан, имеш; йөҙ йортта ут сыҡҡап, имеш; һыуҙарҙың боҙҙары ирегән, имеш. Ҡәберенә һалғас, ер аҫтынан «Мәрхәбә! Мәрхәбә!» тигән тауыштар ишетелгән, имеш... Ҡәбере өҫтөндә аҡ нур һуҙылып күккә менгән, имеш... Шәйех Бисатам, Хужа Баһауетдин, Хәсән Басрый кеүек әүлиәләр, аҡ сәскәләр, салмалар менән ишандың мәсжетенә килеп, хәтем бағышлағандар, имеш...

Шундай «имеш-мимеш»тәр менән бигерәк ҡараңғы ҡаҙаҡ далаһы гөр итте.





* * *

Ҡарт ишан үлгәс, йәш ишан тыуғас, аңлы йәштәр үҙ-ара йыйылышып, һәр ике ишан хаҡында ла мөзәккәрә ҡылыштылар.

— Ишан мәрхүм (Алла рәхмәт итһен), тураһын әйткәндә, ысын ғалим да түгел, тәрәҡҡый пәрүәр ҙә түгел ине, — тинеләр.

— Тәрәҡҡый пәрүәр булһа, фәлән, фәлән... итмәҫ ине, — тинеләр...

— Ысын ғалим, ысын тәрәҡҡый пәрүәр, ысын яңылыҡ тарафтары итеп күрһәтеүҙәре барыһы ла буяу ғына, — тинеләр.

Яңы ишан хаҡында төрлө исемгә киттеләр. Бәғзеләре: «Атайы намы менән түгел, бәлки үҙ юлы менән «тәәссеф»те, «рәһибаният»ты хаҡ рәғәйәһе менән рәғәйә ҡулыуын алып барғанда ярай», — тинеләр. «Мөриттәрен ҡулға алғас, заманса тәрбиә итһә, саф ислам рухын урынлаштырырға тырышһа, тәбриккә генә лайыҡ ул саҡта», — тинеләр.

Шул рәүеш төрлө фекерҙәр бәйән ителгәндә, аранан береһе тороп:

— «Юҡ, иптәштәр, булмаҫ, ғәҙәт мәхкүмдер: нисәмә йыллыҡ тамыр йәйгән ишанлыҡ әкәмәттәрен бөтөрөү мөмкин түгел, ул мөхиткә йотола-

---

Мөзәккәрә ҡылышыу — һүҙ алышыу.
Тәрәҡҡый пәрүәр — прогресс яҡлы кеше.
Нам — исем, ат.
Рәғәйә — бер дәүләттең халыҡтары.

саҡ, шул мөхит уны һурасаҡ... Мәхтүмдең замана ишаны булыуы өсөн ишанлыҡтың бөтә әсасы һәм мөридтәре яңы булыуы шарт», — тине.

Шунда береһе: «Улай булһа, беҙ йәштәр синыфы үҙебеҙ уға мөрид булып яҙылайыҡ», — тине. Мәжлес көлөшөп таралды.

Ҡарт ишан хаҡында мин үҙ тарафымдан бер һүҙ әйтә алмайым. Ул ашаны, йәшәне, булды, бөттө... үлде, ҡотолдо... вәссәләм.

Алла рәхмәт әйләгәй, урыныны йәннәт әйләгәй, йөҙҙәрен аҡ, һүҙҙәрен хаҡ, рухтарын шат әйләгәй.

Әлбиттә, уның хеҙмәттәрен һәр кем тәҡдир иткән кеүек, мин дә итәм. Билхаса, уның ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙы ағартыу юлындағы хеҙмәтен бик ҙур хәйер һәм ҙур хеҙмәт тип яд итәм.

Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ халҡы ишанға фәүҡылғадә мөнтәзыйрҙыр. Уны белеп торһондар.

Мин яңы ишан хаҡында ла артыҡ сүи зан менән ҡарай алмайым. Башта мин ишанлыҡты ҡабул итмәҫ, тип уйлағайным.

Уйлағысым һынһа ла, һаман өмөттө өҙмәйем:

— Ишанлыҡты ҡабул итеиеүҙән, иншалла, берәр сәйәсәте, берәр хәйерле мәле, маҡсаты булыр, — тим.

Неужели «Сөләймән йөҙөгө» кейеүҙән маҡса-

---

М ә х к ү м — хөком ителгән.
Ә с а с — нигеҙ.
М ө н т ә з ы й р — көтөп тороусы, өмөт итеүсе.





ты фәҡәт «асат кәсеп» кенә булыр? Ай-һай, белмәйем!..

«Ҡармаҡ» журналында кемдер бирәү «Китабеннас» тигән әҫәрендә уның хаҡында шулай тимеш ине:

*Ғабдрахман Рәсүл, һиңә ишанлыҡ ҙур мираҫ,*
*Булһаң ишан, мәғнүн урынына ғилем —*
*әхләҡ өләш!*

Был фекергә мин дә бөтә барлығым менән иштирәк итәм.

---

М ә ғ н ү н — боҙоҡ фекер, ялған.